Тема: З Биишеваның «Дуҫ булайыҡ» повесында халыҡ йолалары һәм эштәре.

**Маҡсат**: Уҡыусыларҙың әҫәр тураһында фекерен асыҡлау, башҡорт халҡының йолалары һәм эштәре тураһында фекер алышыу.
Тыуған ергә, уның халҡына, ғөрөф-ғәҙәттәренә ҡыҙыҡһыныу, ихтирам тойғоһо тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу**: дәреслек, ҡымыҙ яһауға ҡағылышлы һүрәттәр, плакат, «Аш алдында баш эйелә», «Ҡунаҡ булһаң тыйнаҡ бул», фонограмма, бәйләнгән шәл.

**Дәрес барышы.**

I. Ойоштороу мәле.

- Уҡыусылар, һеҙ ниндәй халыҡ йолаларын, эштәрен беләһегеҙ? Әйҙәгеҙ, ошо кроссвордты сисеп алайыҡ.

| | | | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | Й | | | | | | | | | |
| | | О | | | | | | | | | |
| | | Л | | | | | | | | | |
| | | А | | | | | | | | | |
| | | Л | | | | | | | | | |
| | | А | | | | | | | | | |
| | | р | | | | | | | | | |

1.Туй.

2. Ҡор йыйыу.

3.Тула баҫыу.

4. Һабантуй.

5. Шәл өмәһе

6.Ҡаҙ өмәһе.

7.Ҡарға бутҡаһы.

- Тема, маҡсатты әйтеү.

II. Тема өҫтөндә эш.

1. «Дуҫ булайыҡ» повесының «Ауылда тәүге кис» бүлегендә ниндәй йола хаҡында һүҙ бара?

(Ҡунаҡ ҡаршылау, ҡунаҡта булыу)

Кемдәр ҡунаҡ?

(Юлдаш һәм унең атаһы)

Зөләйха инәй Юлдашҡа ниндәй шелтә яһай?

(Ололарҙың һүҙен бүлдерергә ярамай).

- Бер уҡыусы әҫәрҙә табынға кемдәрҙең нисек ултырыуы тураһында һөйләй. (Уҡыусының һөйләүенән сығып һығымтаны түбәндәге схемаға яҙып ҡуябыҙ.)

- Уҡыусылар, һеҙгә өй эше итеп ҡунаҡлашыу тураһында мәҡәлдәр табып килергә бирелгәйне, кем күпме мәҡәл тапты? (Мәҡәлдәр уҡыу. «Аш биргәс ҡашыңды йыйырма», «Аштың майы, һүҙҙең яйы була» һ.б.)

- Бер уҡыусы **« Ололарҙы ололау»** ҡобайырын башҡара.

2. Сәлмән бабай ниндәй йола тураһында һөйләй?

( Уҡыусылар һабантуй, унда Хәсән бабайҙың көрәше тураһында һөйләй)

- Башҡорт көрәше ир-егеттәрҙә ихтыяр көсө, ныҡышмалылыҡ тәрбиәләгән. Хәҙерге көндә лә милли көрәш киң ҡолас ала. Күптән түгел

республикабыҙҙа был төр буйынса донъя чемпионаты булып үтте. Был бәйгелә беҙҙең райондан кем ҡатнашты?

(Уҡыусылар райондашыбыҙ, көрәш буйынса чемпион Әсләм Хафизов тураһында һөйләй)

3. Зөләйха инәй нимә менән шөғөлләнә?

(Ҡымыҙсылыҡ)

(Уҡыусылар ҡымыҙҙы эшләү процессы тураһында һөйләй)

Һүрәттәрҙә нимәләр күрһәтелгән? (Һүрәттә күрһәтелгән предметтар схемаға теркәлә бара.)

- Эйе, башҡорт халҡы элек-электән ҡымыҙсылыҡ менән шөғөлләнгән, башҡа милләт халыҡтары менән дуҫ йәшәгән. Беҙгә ҡымыҙ эсеп, сәләмәтлектәрен нығытырға хатта Л.Н.Толстой, А.П.Чехов та килгән.

4. Зөләйха инәй үҙ һөнәренә кемде өйрәтеп ҡалдырырға теләй?

( Киленен). Ә килене ниндәй эште үҙ итә? (Дебетселек).

( Уҡытыусы дебетселек һөнәре менән таныштыра. Бәйләнгән шәл өлгөһө күрһәтелә.)

III.Йомғаҡлау.

Бөгөн беҙ З.Биишеваның әҫәрендә һүрәтләнгән йолалар һәм эштәр менән танышып үттек. Һеҙ үҙегеҙ өсөн ниндәй фәһем алдығыҙ? ( яуаптар тыңлана)